*Әхмәт* ***СӨЛӘЙМӘНОВ***

Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың тыуыуына 175 йыл

# Табын өләңе һәм ике табындаш

*Көллө ғаләмгә мәғлүм: халҡыбыҙҙың милли ғорурлығы тигән титулға эйә булған бөйөк шәхестәребеҙ — Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев (1841—1907) һәм Мәжит Ғафури (1880—1934) — икеһе лә башҡорттоң Табын ырыуынан сыҡҡан. Әҙ ҙә түгел, күп тә түгел, тип-теүәл егерме ете йыл замандаш булған был ике затыбыҙ дәстархан янында ла табындаш булғандарҙыр, моғайын. Ә ундай табындаштар, ғәҙәттә, уртаҡ фекерле була. Мәғрифәтселектән тыш та, уларҙың уртаҡлашыр уй-ниәттәре әҙ булмағандыр. Ике мәғәнәләге табындаштар хаҡында һүҙ барғанда иһә, әле әйтелгәнгә, бигерәк тә, тип өҫтәге килә. Һәр хәлдә, Өмөтбаев менән Ғафури ошо билдәләмәгә, заманында Табын тигән псевдонимға эйә булған остазым Жәлил Кейекбаев әйтмешләй, төкмә-төк тура килә. Был тура килеш, уларҙың мәғрифәтселек мәсьәләһендәге уртаҡлыҡтарынан тыш, айырыуса фольклорға мөнәсәбәттәрендә сағылыш тапҡан.*

### 1. М.Өмөтбаевтың башҡорт өләңе идеяһын яҡлағаны

Йәшерен-батырыны юҡ, Көнбайышта берәй нәмә “шылт” иттеме, беҙҙә шул артығы менән “былҡ” итеүсән. Евроцентризм сире тиҙәр уны. Был -изм халыҡ ижады өлкәһендә лә үҙенекен итеп ята. Ҡасандыр халыҡтың ауыҙ-тел ижады хаҡында публика алдында үҙе уҡыған лекцияларында һүҙ сәнғәтенең был төрөн Ғабдулла Туҡай, ҡайһы бер рус фольклорсыларынан күрмәксеме — нисек, “халыҡ әҙәбиәте” тип исемләгән. XX быуаттың тәүге сирегендә Хәбибулла Ғәбитов, Сәғит Мирас, Ғәбделәхәт Вилданов кеүек үҙебеҙҙең тикшеренеүселәребеҙ ҙә ошо терминды ҡулланыуҙы хуп күргән. Хәҙер инде һүҙ сәнғәте менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы булмаған археология фәне вәкиле Уильям Джон Томс исемле инглиз ғалимы 1846 йылда тәҡдим иткән (грек теленән әйләндергәндә, “халыҡ теле” мәғәнәһен биреүсе) “фольклор” терминынан ғына һалдырыусанбыҙ. Әлеге өс тикшереүсебеҙ әйтеүенсә, халыҡ әҙәбиәтенең һөйләп башҡарыла торғандарын, шул иҫәптән бөгөн беҙ “эпос” тип атарға күнеккәндәребеҙҙе лә борон “ҡарһүҙ” йәки “ҡары һүҙ” тип йөрөтөүҙәрен иҫкәрткәндәр. Әйткәндәй, был термин Үҫәргән ырыуы башҡорттары һәм уларға күрше ҡәүемдәрҙә, шул иҫәптән ҡаҙаҡтарҙа ла әле лә әүҙем ҡулланыла. “Эпос”, тип айырып әйтеүемдең сәбәбе шул — ул да беҙҙең телебеҙгә рус фольклоры ғилеме аша килеп ингән.

Үҙенең тыуған иле Грецияла был термин башта “бәйән итеү” мәғәнәһендә ҡулланылыр булған. Аҙаҡ ул киң ҡоласлы ауыҙ-тел һәм әҙәби әҫәрҙәрҙең жанр атамаһы рәүешендә ҡулланыла башлаған. Ундай әҫәрҙәрҙең күп халыҡтарҙа милли атамалары бар: мәҫәлән, саха ҡәрҙәштәребеҙ — олонхо, мосолман төркиҙәренең күпселеге — дастан, ҡаҙаҡтар — йыр, рустар — былина, украиндар — дума тиҙәр. Шундай уҡ мәғәнәлә көнбайыш халыҡтарында, руссалап әйткәндә, “песнь” термины ҡулланыла. Һәр хәлдә, боронғо германдарҙың һундар менән көрәше, Зигфрид һәм уның ҡатыны Кримхильданың ҡаһарманлығын данлаусы эпос “Das Nibelungenlied” — “Песнь о Нибелунгах”; Бөйөк Ҡарлдың рыцарлыҡ ҡаһарманлыҡтарын бәйән итеүсе француз эпосы иһә “Chanson de Roland” — “Песнь о Роланде” тип атала. Уҡымышлы кеше булараҡ, герман һәм французлдарҙың шул эпик әҫәрҙәре менән М.Өмөтбаев, моғайын, таныш булғандыр. Һәр хәлдә: “Башҡорттарҙың боронғо йыры өләң тип атала. Өләң — ул хикәйәт, йәғни эпос”, — тип, ул шуларҙың йоғонтоһонда әйткәнгә оҡшай [6, 189-сы б.]. Был фаразды уның: “Өләң йәки башҡорт эпосы осоро, ...башҡа европаларҙыҡы кеүек үк, батырҙар дәүере менән тамамлана”, — тигәне лә [6, 192-се б.] ҡеүәтләй. Бынан иһә эпос яҙмышын да автор Европа үлсәме менән үлсәргә тырышҡан икәне яҡшы аңлашыла. “Ҡырғыҙҙарҙа (йәғни ҡаҙаҡта. — ***Ә.С.***) өләң йыры хәҙерге ваҡытта ла (йәғни XIX быуаттың икенсе яртыһында ла. — ***Ә.С.***) беренсе урында тора. Ләкин улар үҙҙәре ябай йырҙарҙы [ла] өләңдәрҙән айырмайҙар, шуға бөтәһен рәттән өләң тип атайҙар”, — тип [6, 192-се б.], конкрет алғанда, башҡа халыҡтар эпосы Европа үлсәменә һыймауын таныған, ундай мөмкинлеккә башҡорттоҡо ла эйә икәнен иҫәпкә алып тормаған. “Аҡай яуы”, “Ҡарат”, “Ҡараһаҡал”, “Юлай менән Салауат”, “Байыҡ Айҙар сәсән” ише эпик ҡобайырҙарыбыҙҙың XVIII—XIX быуаттарҙағы тарихи ваҡиғаларҙы сағылдырыуы Өмөтбаевтың алда күрһәтелгән: “...башҡорт эпосы осоро, ...башҡа европаларҙыҡы кеүек үк, батырҙар дәүере менән тамамлана”, — тигәнен инҡар итә, дөрөҫөрәге, милли эпик репертуар яҙмышына Европа үлсәмдәре тура килеп етмәүен күрһәтә. Хәйер, тора-торғас, М.Өмөтбаев, үҙе лә һиҙмәҫтәнме, был һуңғы әйтелгәнде ҡеүәтләгән. Был фекергә “Өфөнөң тарихына ҡағылышлы материалдарында” тигән яҙмаһындағы бер иҫкәрмәһе килтерә. Ә унда былай тиелгән: “Бөйөк Петр заманында сығарылған йырҙар иһә өләң атамаһы менән йөрөтөлгән эпик әҫәрҙәр рәүешендә башҡарыла. Быларҙан тыш, хәҙерге ваҡытта (йәғни М.Өмөтбаев үҙе йәшәгән дәүерҙә. — ***Ә.С.***) ижад ителгән башҡорт йырҙары бар. Шундай йырҙарҙың береһендә үрелгән сәсле һалдат телгә алына. 25 йыл хеҙмәт иткәндән һуң, өйөнә әйләнеп ҡайтҡас, үтә ҡартайған әсәһе уның сәсен үрә һәм улына уның менән тиҙҙән буласаҡ осрашыу тураһында күргән төшөн көйләп һөйләй” [6, 203-сө б.].

Башта: “Өләң — ул... эпос”, — тип әйтеүенә ҡарап, М.Өмөтбаев бөтә эпик сюжеттарыбыҙҙы ла күҙ уңында тотҡан икән, тигән һығымтаға килһәк, юҡҡа ымһынып, һемәйеп ҡалыуыбыҙ — шул булыр. Баҡтиһәң, өләң, тигәнендә, ул бары героик эпик ҡомартҡыларыбыҙҙы ғына күҙ уңында тотҡан, имеш. Бындай һығымтаға килергә: “Бөтә башҡорт батырҙары өләңдә йырлана: мәҫәлән, Мораҙым (китабына ул “Боронғо башҡорттарҙың өләңдәре” тип, өлгө рәүешендә “Иҙеүкәй менән Мораҙым” ҡобайырынан бер өҙөк биргән. — ***Ә.С.***), Заятүләк,

Сура батыр һәм дары есен аҙ есҡәгән (йәғни, ауыҙ тултырып әйтерлек батырлыҡ күрһәтмәгән. — **Ә.С.**) бүтән күп кенә батырҙар", — тигәне [6, 192-се б.] һәм "Алпамыша"ны ла, "Йән-Таһир вә Йән-Зөһрә" дастанын да әкиәттәр тип иҫәпләүе, "бындай ҡыҙыҡлы әкиәттәр күп" [6, 191-се б.], тип әйтеүе, тимәк, улар кеүек үк тормош-көнкүреш эпостары төркөмөнә ҡараған сюжеттарҙы ла күҙ уңында тотоуы ла мәжбүр итә. Был бер яҡлылығы ла милли эпосыбыҙға М.Өмөтбаевтың Европа үлсәмдәре менән килеүенә — баҙыҡ бер дәлил була ала.

М.Өмөтбаевтың "Башҡорттар" очергы бер үк ваҡытта әле һүҙ барған темаға ла, халҡыбыҙ йолаларының һәр кем өсөн фарыз иҫәпләнгән талаптарын хәтергә төшөрөүе менән дә ҡиммәт. Бына уның: "Аҫаба башҡортҡа өс нәмәне белеү фарыз: беренсеһе — үҙеңдең сығышыңды, йәғни үҙ ырыуыңды белеү, икенсеһе — йондоҙҙарҙы исемләп аңлатыу һәм өсөнсөһө — хандар тураһындағы риүәйәттәрҙе һәм өләңдәрҙе белеү", — тигәне күҙ уңында тотола [6, 190-сы б.]. Ул фарыз йолаларға өләң-эпостың танып белеү, тәрбиәүи әһәмиәте идеяһы һалынған. Тик, ғәҙәттә, ғалим-шағир телгә алған "өс нәмә"нең беренсе "пункт"ына ғына иғтибар йүнәлтелә. Мәғлүмәт сараларында ла, төрлө кимәлдәге йыйындарҙа ла, ғалим-ғөләмә, уҡытыусылар ауыҙынан да шуныһы йыш ҡабатлана. Быға республикабыҙҙа рәсми рәүештә шәжәрә байрамдары үткәрелә башлағас, был "пункт"тың бәҫе ныҡ артыуы ла булыша, әлбиттә. Йола буйынса үҙ нәҫелнәсәбеңде кәмендә ете быуынға тиклем белеү фарыз тип иҫәпләнеүен иҫкә төшөрөп, М.Өмөтбаев әйткәнгә шуны ла өҫтәп ебәреүсәнбеҙ. Был эш үҙенең ыңғай һөҙөмтәһен бирә. Йәштәребеҙ зат-зориятын танып, никах тәңгәлендә ҡан бутау кеүек яҙыҡлыҡтан арына, туғанлыҡ кәҙерен ныҒыраҡ белә башланы. Ләкин йолабыҙҙың "үҙ ырыуыңды белеү" фарыз тигәненә М.Өмөтбаев биргән юлаҫты иҫкәрмәһендә әйтелгән һүҙҙәр иғтибарҙан ситтә ҡала килә. Ә унда былай тип әйтелгән: "Был осраҡта үҙ ырыуын (башҡорттар) йыш ҡына ниндәй ҙә булһа ханға йәки бейгә ҡайтарып ҡалдыралар. Мәҫәлән, Үзбәккә, Туҡтамышҡа, Ҡыпсаҡҡа, Аҡһаҡ Тимергә һәм башҡаларға" [6, 190-сы б.]. Әммә әлегә ошо исемдәр менән бәйле риүәйәт йә эпос осрағаны юҡ. Күрәһең, улар ҙа тарих урманында аҙашып тороп ҡалған. Бәлки, быға рәсми идеологияның ундай әҫәрҙәрҙе "хандар, феодалдар эпосы" тип нарыҡлауы ла сәбәпсе булғандыр.

Үкенескә ҡаршы, М.Өмөтбаев иҫкә төшөргән өс фарыз ғәмәлдең икенсеһе һәм өсөнсөһө иһә бөтөнләй һирәк телгә алына. Йола йондоҙҙарҙың исемдәрен генә түгел, шул исемдәргә бәйле легендаларҙы белеүҙе лә талап иткән. М.Өмөтбаев был хаҡта әйтергә онотмаған: "Ҡарт башҡорттар, азиялар кеүек үк, йәштәргә йондоҙҙар хаҡындағы легендаларҙы төшөндөрәләр" [6, 190-сы б.]. Ана ни тигән ул. Өләң тураһында һүҙ асҡас, йондоҙҙарҙың исеме менән бәйле легендалар ғына түгел, эпик сюжеттар булыуын да күҙ уңында тотҡандыр, моғайын. Әгәр был фаразда хаҡлыҡ булһа, Ҡесе Етегән йондоҙлоғо, Тимер Ҡаҙыҡ, Һары ат, Буҙ ат (Аҡбуҙат) йондоҙҙарының исемдәрен аңлатыусы космогоник мифтарҙы үҙ эсенә алған "Урал батыр" ҡобайырынан тыш, шундайыраҡ мифтарға нигеҙләнгән эпостарыбыҙ ҙа булғандыр, тик беҙгә килеп етмәгәндер, тип уйларға ҡала. Ошо йөмләнән ғалим-шағирҙың: "Өләң йырҙарында... хандарҙың угландарына өгөтнәсихәттәре йырланған", — тигәне лә [6, 190-сы б.] иғтибарға лайыҡ. Тик был осраҡта автор ниндәй эпостарҙы күҙ уңында тотоуын ғына әйтмәгән. Беҙ белгән

эпик сюжеттарҙа иһә ундай мотив бөтөнләй осрамай. Бынан иһә М.Өмөтбаев өләң хаҡында яҙған дәүерҙә ундай әҫәрҙәр булған, тик улар беҙҙең көндәргәсә һаҡланып ҡалмаған, XX быуаттың башынан алып эпос яҙып алыу менән шөғөлләнеүселәргә лә юлыҡмаған, тип тағы ла үкенес белдерергә генә ҡала.

Ғалим-шағирҙың "Хандар тураһындағы риүәйәттәрҙе һәм өләңдәрҙе белеү" һәр башҡорт өсөн фарыз иҫәпләнеүе хаҡында әйткәне лә, башты сайҡай-сайҡай, күп эпостарыбыҙҙың юғалыуына үкенес белдерергә мәжбүр итә. Шуға ла М.Өмөтбаев телгә алған Петр батша заманында сығарылған өләңдәрҙе белмәүебеҙҙе өҫтәһәк, юғалтыуҙарыбыҙ бихисап икән дә баһаң, тип, ҡолас йәйеп, аптырарға ғына ҡала. М.Өмөтбаев ғүмер һөргән дәүерҙә сыҡҡан "үрелгән сәсле һалдат телгә алына" торған йырҙы ла белмәйбеҙ. Дөрөҫ, ғалимдың, "хәҙерге ваҡытта ижад ителгән... йырҙарҙың береһендә үрелгән сәсле һалдат телгә алына", тигәне "Әрме" йырының

Әрмеләрҙә йөрөп, сәс еткерҙем,
Сәскенәйем етте үрмәгә.
Егермелә китеп, ҡырҡка етеп,
Нисек ҡайтып илде күрмәгә?
(Ризыҡ яҙған булһа, бер ҡайтырбыҙ
Тыуған еркәйҙәрҙе күрмәгә), [10, 130-сы, 129-сы бб.] —

тигән һүҙҙәре менән ассоциациялаша. Әммә М.Өмөтбаевтың һүҙҙәренән ул телгә алған һалдатҡа бәйле йырҙың тексы ла, тарихы ла башҡа икәне аңлашыла. Эпос мәғәнәһендә өләң тураһында һүҙ алып барғанында, иҫкә төшөрөүенә ҡарағанда, был йыр ҙа өләң-йыр булғандыр. Хатта улай уҡ булмаған сүрәттә лә, тарихы менән ул йыр — икеһе бергә эпик сюжетты хәтерләтә. Бындай күренешкә XX быуаттың 30-сы йылдарында башҡорт йырҙарын өйрәнергә килгән музыка белгесе Лев Лебединский ҙа иғтибар иткән. Бына ул ни тигән: "...свою многовековую, насыщенную богатыми событиями историю башкиры частично отобразили в узун-кюй, с которыми органически связаны эпические сказы, так называемые "истории песен, обычно предваряющие исполнение многих узун-кюй в быту" [13, 14-се б.]. Йыр менән уның тарихын бәйән иткән риүәйәт бергә башҡарылыуын күҙ уңында тотоп, заманында Ҡирәй Мәргән дә: "Шул рәүешле, ваҡиға йыр менән дә, һүҙ (йәғни, йыр тарихы рәүешендәге риүәйәт. — ***Ә.С.***) менән дә, дөрөҫөрәге, был ике ижад төрөнөң аралаш килеү юлы менән сиселә. Шулай итеп, эпик форманың тағы бер үҙенсәлекле дауам ителеше барлыҡҡа килә", — тип яҙғайны [12, 369-сы б.]. Хәҙер фольклор фәнендә бындай күренеш "халыҡ эпосының һуңғы формаһы" ("поздние формы народного эпоса") тигән билдәләмә алды. Украин халҡының думаһы, көньяҡ славяндарҙың гайдук йырҙары, төрлө халыҡтарҙың тарихи йырҙары, балладалары халыҡ эпосының ана шундай формаһына ҡарай [10, с.457].

Әле әйтелгәндәрҙең барыһына ла М.Өмөтбаевтың бер-ике ауыҙ һүҙ менән генә, егерме биш йыл һалдат хеҙмәтен атҡарып, иленә "сәскенәйе үрмәгә еткән" хәлдә ҡайтып ингән һалдат хаҡындағы йыр һәм уның тарихы булыуы хаҡында әйткәне сәбәпсе. Тимәк, шулай ғына әйтһә лә, мәғрифәтсе-шағир ғалимлыҡ интуицияһы менән йыр һәм уның тарихын бәйән итеүсе риүәйәт йөҙөндә фольклорыбыҙҙа "халыҡ эпосының һуңғы формаһы" йәшәп ятыуын ярайһы аныҡ тойған, тип һығымта яһарға була. Ғөмүмән, ул башҡорт өләңдәренә юғары баһа биргән. Быға уның: "Боронғо башҡорттар тураһында төшөнсә алыу өсөн, башта

уларҙың өләндәрен (сказания) рус теленә тәржемә итергә кәрәк... Һәр халыҡтың тарихы өйрәнелһен өсөн, уның үҙ Ҡарамзины булыуы шарт. Ул да (башҡорт Карамзины ла. — ***Ә.С.***) шулай уҡ башҡорттар хаҡындағы төшөнсәгә урта быуат йырҙары (өләндәре. — ***Ә.С.***) [аша] барып етәсәк", — тигәне лә [6, 194-се б.] дәлил. Бик тә ҡыҫылған, ҡыҫҡартылған хәлдә булһа ла, Аҡташ хан, Искәндәр, Сура батыр, Ҡанлы күл тураһындағы өләндәрҙең варианттары менән таныштырыуы башҡорттарҙың эпик репертуары хаҡындағы төшөнсәбеҙҙе байтаҡҡа киңәйтеүгә хеҙмәт итте. Хатта өләң тураһында әйткәндәренән аңлашылған, әммә беҙҙең көндәргәсә килеп етмәгән эпик ҡомартҡылар хаҡындағы мәғлүмәттәренең әһәмиәте лә шуның менән билдәләнә.

Энциклопедик мәғлүмәтле ғалим-шағирыбыҙҙың телгә алынған күҙәтеүҙәре фольклор ғилемебеҙҙә быға саҡлы ныҡлап өйрәнелмәне. Уның бер сәбәбе М.Өмөтбаевтан әле генә килтерелгән иҫкәрмәләр менән иҫәпләшеп тормаҫтан, өләңде (әлбиттә фольклор ғилеменең бөгөнгө торошонан сығып) тик ҡаҙаҡ фольклоры күренеше тип иҫәпләү булғандыр, моғайын. Әйткәндәй, Ҡирәй Мәргән был хаҡта туранан-тура: "Беҙгә башҡорт халыҡ ижады ерлегендә үләң (автор шулай ҡулланған. — ***Ә.С.***) тигән жанр йәки ижад төрө булғанлығы (дөрөҫөндә, эпосты башҡортттарҙың шулай тип атауҙары. — ***Ә.С.***) билдәле түгел. Башҡорт фольклоры менән ҡыҙыҡһыныусы ҡайһы бер ғалимдар, күрәһең, был терминды аналогия рәүешендә, ҡаҙаҡ фольклоры ерлегенән күсергәндәрҙер (Уны беҙ М.Өмөтбаев яҙмаларында ла осратабыҙ)", — тип яҙғайны [12, 18-се б.].

Милли эпосыбыҙ хаҡында М.Өмөтбаев әйткәндәр менән килешкән сүрәттә, эпостарыбыҙҙың әлегә беҙ "эпик ҡобайырҙар" тип атаған өлөшөн "өләндәр" тип кенә билдәләргә лә булыр ине. Эпос-өләң белгестәре киләсәктә был фекерҙәрҙе иҫәпкә алыр тигән өмөт бар.

Шулай ҙа Өмөтбаевтың һәр әйткәненә: "Йәрхәмбикалла!" — тигәнсе, уны тәнҡит күҙлегенән ҡабул итеү кәрәк. Ни өсөн тигәндә, эпос-өләң жанрын билдәләгәндә, ул үҙе лә буталғылаған. Мәҫәлән, беҙ иртәк тип белгән эпик сюжетлы әҫәрҙәрҙе уның әкиәт тип атауы, эпос яҙмышына көнбайыш үлсәмдәре аша килеүе тәнҡиткә мохтаж икәнен иҫтән сығармау зарур.

## 2. М.Ғафуриға М.Өмөтбаев телгә алған Заятүләк тураһындағы өләңде йәнле башҡарылышында тыңларға яҙғаны

"Башҡорттар" тигән очергында: "Бөтә башҡорт батырҙары өләңдә йырлана", — тип башлаған һөйләмендә тарихи эпос (өләң) ҡаһармандары Мораҙым һәм Сура батырҙар менән бер рәттән Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев "Заятүләк менән Һыуһылыу" мифологик иртәге геройын да, йәғни Заятүләкте лә телгә алған. Тик артабан был әҫәр һәм уның геройы хаҡында бер һүҙ ҙә әйтмәгән. Шуны иҫәпкә алған кеүек, ырыуҙашы Мәжит Ғафури махсус рәүештә ошо эпосҡа мөрәжәғәт иткән. Ул 1909 йылда Асылыкүлгә сәйәхәт ҡыла. Унда барыуының маҡсатын "Заятүләк менән Һыуһылыу" тип исемләнгән мәҡәләһендә шағир башта уҡ бына нисек аңлатҡан: "...бер йәһәттән, күңел асыу һәм ял итеү, матур күл буйын күреү, икенсе яҡтан, Асылыкүл тирәһендәге күптән бирле үҙҙәренең башҡортлоҡтарын, ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлап килгән башҡорттарҙы күреү, иҫке, моңло, дәртле милли көйҙәрен ишетеү ине. Ысынлап та, улар был көнгә саҡлы иҫке ғөрөф-ғәҙәттәрен,

йыр-көйҙәрен ысын көйөнсә һаҡлап килә алғандар. Хатта тирмә менән күсмә хәлендә йөрөүҙәрен дә 10—15 йыл элек кенә ташлағандар” [5а, 162-се б.]. М.Өмөтбаев күҙ уңында тотҡан өләң жанрына теркәлеүгә дәғүә итмәле “Ғәйеп хазина” (1915) тигән әҫәренең инешендә М.Ғафури Асылыкүл тирәләп йәшәгән Мең ҡәүеме башҡорттарының башҡортлоҡтарын, ғөрөф-ғәҙәтен һаҡлап ҡалыуы тураһында үҙе әйткәнде тасуирлауы кеүек ҡабул ителә:

Урал тауҙарының аҫты һәм өҫтө бик матур саҡта,
Бабайҙарҙың бабайҙары күсеп йөрөгән замандарҙа,
Бейек тауҙар янында, һыу буйында, шәп яландарҙа
Күсеп йөрөгән ваҡытта улар йәннәт кеүек ерҙә,
Ҡара сәүкә кеүек, күп һәм матур малдар менән бергә,
Ҡымыҙ эсеп, ҡурай уйнап, оҙон көйҙәр менән йырлап,
Ҡәрәк кем килһә лә, хөрмәт итеп, ҡунаҡ итеп һыйлап,
Йәшәп ятҡан... [ 5, 229-сы б.]

Ғафуриҙың был һүҙендә осмот та шаштырыу, аштырыу ғәләмәте юҡ. Бына бер миҫал. Бынан бер быуат әүәлерәк шағирҙы йыр-моңдары, ирәйеп китеп тыңларлыҡ итеп “Заятүләк менән Һыуһылыу” иртәген башҡарыуҙары менән һоҡландырған Мең ҡәүеменән бер бай яҙ башынан тирмәһен ете юл сатына ҡорҙорор булған. Ҡорҙорған да, ҡайһы юлдан кем генә үтмәһен, туҡтатып, ашатып-эсереп, алғыш-рәхмәттәренә ирәйеп, уларҙы ҡәҙерләп оҙатып торған. Ҡем дә кем уның тирмәһенә һуғылмай үтә, уны ла кире бороп индерер булған. Уның улай-былай егеттәреңә биргеһеҙ ике ҡыҙы булған. Икеһенең дә яратып менгән аттары әйәрле килеш түбәлек аҫтында һәр саҡ әҙер генә торған. Әгәр ҙә мәгәр саҡырғанға үткенсе ыжламаһа, бай:

— Барығыҙ әле, бара һалып, алдына сығығыҙ ҙа кире бороп алып килегеҙ әле шуны! — тип әйтеүгә ике ҡыҙы:

— Була ул, атай! — тиешеп, һә тигәнсе арғымаҡтарына атлана һалып, теге тыңлауһыҙҙың артынан төшкән. Аллы-артлы сабып барып, тегене ҡыуып етеп, икеһе ике яҡлап юлын быуғандар.

Боҫло ашты бора баҫҡан,
Бәхетенән йәйәү ҡасҡан,
Ҡасып барып, ҡасып барып,
Юлы уңмай, үлер астан...

— Шуны белмәйһеңме ни!? — тиешеп, ай-вайына ҡуймай, тегене бороп алып килеп, ҡаҙы-ял менән һыйлап, ҡымыҙ, буҙа эсереп, һыуһынын ҡандырып, оҙатыр булғандар. Бындай йомарт бай әҙ булмаған башҡортта (фольклор экспедицияһы материалдарынан).

Шуныһы ла мөһим: беҙҙең заман фольклорсылары һымаҡ, йыр тыңлайым тип, өйҙән-өйгә лә йөрөмәй Ғафури. Ҡиреһенсә, Ҡаңлы, Сапай ише ауылдарҙан ҡурайсыларҙы, йырсыларҙы бер урынға йыйып ала. Аңлашыла торғандыр, күмәк һөнәрмән бергә булғанда, сәм, үҙ-ара ярыш мөмкинлеге тыуа. Бындай саҡта бер-береһен төҙәтергә лә, береһе һөйләгәнде йә йырлағанды икенселәренә ни менәндер тулыландырырға форсат тыуа. Ғафуриҙың ошондай форсатты оҫта файҙаланыуы, Асылыкүлгә килгәнгә тиклем дә фольклор йыйыу менән шөғөлләнеүе ихтимал тигән фекер тыуҙыра. Шул рәүештә, шағирҙың был мәҡәләһе урындағы йыр-көй оҫталарының репертуары, башҡарыу оҫталығы

хаҡында бер бөтөн фекер туплау мөмкинлеге бирә. Ғафуриҙың: “Мин, сысҡан көтөп ултырған бесәй кеүек, ҡурай уйнаған һәм йырлаған башҡорттарҙың ауыҙҙарына ҡарап, башҡа нәмәләрҙе тамам онотоп, ҡурайға ҡушылған моңло тауышты ысын күңелем менән тыңлай инем. Башҡорттарым “Ҡара юрға”, “Өйҙөрәк”, “Таштуғай”, “Ашҡаҙар”, “Тәфтиләү”, “Һаҡмар”, “Көрән юрға”, “Ҡантондар” тигән көйҙәрҙе берәм-берәм һыҙҙыралар ине” [5а, 163-сө б.], — тигәне ана шуға дәлил.

Шағир яҙып ҡалдырған был мәғлүмәт шуныһы менән дә әһәмиәтле: уның заманында, йәғни XX быуат баштарында, Асылыкүл төбәгендә хәҙер ҙә мәғлүм халыҡ йырҙары менән бер рәттән әлегә беҙҙең фольклорсыларға юлыҡмаған “Көрән юрға”, “Ҡантондар” ише йырҙар ҙа таралған булған икән. Йәнә, меңлеләр араһында башҡа төбәктәрҙә, хатта Урал аръяғында тыуған йырҙар ҙа билдәле булған.

Ғафуриҙың “Улар хәл йыйған ваҡытта (тимәк, күп уйнап, күп йырлаған уның ҡурайсы менән йырсылары. — ***Ә.С.***) көйҙәрҙең исемдәрен, ни сәбәпле сығарылғанлыҡтарын һөйләтә инем” тигән һүҙҙәре лә бөгөн халыҡ ижады өлгөләрен йыйыу эшенә башлап тотоноусылар өсөн үрнәк кеүек тә, методик кәңәш кеүек тә аңлашыла. Шуның менән бергә егерме биш йыл хеҙмәт итеп, “сәскенәйен үрмәгә еткереп” ҡайтып ингән һалдат тураһындағы йыр һәм уның тарихын бәйән иткән риүәйәте хаҡында әйтеп, шуның да өләңгә тартым булыуына М.Өмөтбаев яһаған ишараны М.Ғафури интуиция ярҙамында иҫәпкә алғандай булыуын да билдәләү кәрәк. Ул, асылда, һәр йырҙың тарихын да һөйләтеп, йыр һәм риүәйәт синтезынан торған “халыҡ эпосының һуңғы формаһы”н тыңлауға ирешкән.

Үҙенең мәҡәләһендә, “халыҡ эпосының һуңғы формаһы”нан тыш, борон эпос, М.Өмөтбаевса әйткәндә, боронғо өләң, нисек башҡарылған — шуны күҙ алдына килтерерлек күҙәтеүҙәрен дә теркәгән М.Ғафури. “Бер ваҡыт “Заятүләк көйө”н уйнап, йырлай башланылар”. Тимәк, элек “Заятүләк менән Һыуһылыу” иртәген ҡурай моңо оҙатылышында йырлап башҡарыр булғандар. Был фекер “Заятүләк” XX быуат башында ҡобайыр хәлендә йә үҙ аллы йыр рәүешендә лә йәшәгән икән, тип фараз ҡылырға форсат бирә. “Ҡара юрға”, “Аҡһаҡ ҡола”, “Ҡуңыр буға” кеүек иртәктәрҙең теҙмә телмәр рәүешендәге өлөштәре үҙаллы йыр булып та йөрөй бит. Ана шуның кеүек, был өләң-эпостың да поэтик өлөштәре йыр вазифаһын башҡарыуы ихтимал. Хәйер, ул фаразлауым раҫланыуын тапты ла инде. Музыка белгесе, сәнғәт фәндәре докторы Риф Сөләймәнов, думбыраһын сиртә-сиртә:

Тауҙы тауға оҡшатып,
Тимер менән ҡоршатып,
Алып килгән тауығыҙ, —
Балҡантауым был түгел.
Балҡантауҙың бейеге... —

тип, Заятүләктең йырын, дөрөҫөрәге, ҡобайырын сәхнәнән дә, эфирҙан да яңғырата башланы.

Хәтерегеҙгә төшөрәм. Һыуһылыуға эйәреп, һыу аҫты батшалығына төшөп, уның менән ҡауышып, шунда йәшәй башлағас, ят илдә толҡа тапмай: “Тыуған ерем — Балҡантау, эскән һыуым — Дим... Бына шул ерҙәрҙе һағынам”, — тигәс, һыу батшаһы шул тауҙы килтерергә ендәрен ебәрә. Улар Балҡантауҙы

тапмай, унының урынына икенсе тауҙы килтереп ултырта. Шуны күргәс, Заятүләк ошо ҡобайырын башҡара.

Йырлы, ҡобайырлы иртәктең (кем белә, бәлки, ул әҫәр тотошлайы менән ҡобайыр булғандыр әле) башҡарылышы хаҡында башлаған һүҙенә Ғафури фольклор фәне өсөн ҡиммәтле тағы шундай мәғлүмәт тә өҫтәй: “Янымда ултырған башҡорт ағай (шуныһы үкенесле, шағир урындағы йыр, ҡобайыр, иртәк башҡарыусыларҙың, ҡурайсыларҙың исемдәрен теркәмәгән. — **Ә.С.**) тынын йыйып, ауыҙын ипләп, һөйләй башланы. Ул быны (иртәкте. — **Ә.С.**) һөйләгән ваҡытта (тимәк, йырлап ҡына ултырмаған, әҫәрҙең сәсмә телмәргә ҡоролған өлөшөн һөйләп тә алған. — **Ә.С.**) ихлас менән ҡулын һелтәп, һөйләгән һүҙенең дөрөҫлөгөнә тамам ышанғанын хәрәкәттәре менән белдерә ине” [5а, 17-се б.].

Шулай итеп, шағир “Заятүләк менән Һыуһылыу” эпосын башҡарыусы сәсәндәрҙең уны ым-ишаралар яһай-яһай, һөйләр ерен һөйләп, көйләр урынын көйләп башҡарыуын, йәғни әҫәрҙең башҡарылыу рәүешен күҙ алдына килтермәле итеп тә, ҡиммәтле күҙәтеүҙәрен теркәгән. Эпос-өләңдең шиғри өлөшө йырлана, сәсмә өлөшө һөйләнә, ә информанттар үҙҙәре бәйән иткәндең хаҡ һүҙ икәнен раҫлай, тигәндәй ҙә була Ғафури.

Икенсенән, эпоста тасуирланған ваҡиғалар, нисек кенә мифология менән һуғарылмаһын, Ғафури Асылыкүлгә барған заманда, йәғни XX быуат баштарында ла, халыҡтың уларҙы ысынға алыуын да беләбеҙ был яҙманан. “Һөйләгән һүҙенең дөрөҫлөгөнә тамам ышанғанын хәрәкәттәр” ярҙамында, йәғни ым-ишаралары менән дә ҡеүәтләүҙән тыш, теге иртәксе башҡорт: “Анауында Заятүләк ташы бар һәм бынан ун биш саҡрым ерҙә, ана, күгәреп күренгән Балҡан тауында, унының ҡәбере бар”, — тип әйберләтә дәлилләүен дә килтергән. Хатта унының үҙ-ара мөнәсәбәтле булмаған төшөнсәләрҙе бәйләргә тырышып: “Был күлдең уртаһы бик тәрән-фәлән. “Заятүләк” тигән китап та бар” [5а, 170-се б.], — тигәне лә — иртәктә тасуирланған хәл-ваҡиғаларҙың ысын булыуына, унының дөрөҫлөгөнә халыҡтың һис бер шик белдермәүенә дәлил. Был фекергә Ғафури үҙе лә баҫым яһап, “Заятүләк” көйөнөң матур, моңло, бик иҫке булыуын, унда һүрәтләнгән ваҡиғаның (хыялый булһа ла) башҡорттарҙың күңеленә ысын төҫлө булып урынлашыуын билдәләгән.

Асылыкүлгә барыуының бер маҡсатын күңел асыу һәм ял итеү, тиһә лә, Ғафуриҙың урындағы фольклор менән мауығыуы ул маҡсатынан ситләшергә мәжбүр иткәндер, моғайын. Хәйер, шул мауығыуы үҙе үк унының өсөн “күңел асыу һәм ял итеү” булыуы ла ихтимал. Һәр хәлдә, бына ни тигән ул: “Мин бында үткәргән өс-дүрт көн ғүмеремдә гел башҡорттарҙың иҫке тормоштарын (йәғни риүәйәт, легенда, иртәктәрен. — **Ә.С.**) һөйләтеү, ҡурай уйнатып, моңло көйҙәрен көйләтеү менән уҙғарҙым” [5а, 164-се б.].

Ғафуриҙың әйткәндәре шундай һығымталар яһарға форсат бирә. Беренсенән, Асылыкүл тирәһе йырсылары һәм ҡурайсылары ла, йырҙы йырлар алдынан улар ниндәй хәл ваҡиға айҡанлы сығарылыуы, ниндәй шәхес исеменә бәйле тыуыуы тарихын, йәғни уларға бәйле риүәйәттәрҙе бәйән итеп алыр булған. Был йола хаҡында Лев Лебединскийҙан башлап, фольклорсыларыбыҙҙан Ҡирәй Мәргән, Марат Минһажетдинов, Әхмәт Сөләймәнов, Салауат Галин, Фәнүзә Нәҙершиналар ҙа яҙғаны бар [13, с.14—15; 12, 368—378-се бб.; 14, 12—13-сө бб.; 11, 56—64-се бб.; 15, 5—10-сы бб.]. Икенсенән, тигән һығымта шунан

ғибәрәт: Ғафури әйтеүенсә, йырсы һәм ҡурайсылар йыр һәм көй тарихына бәйле риүәйәтте, йырлап-йырлап йә ҡурай уйнай торғас, арып киткәндә, тын яңыртҡан арала ла һөйләр булғандар имеш. Өсөнсөнән, йыр, көй һәм халыҡ ижадының бүтән жанрҙары яҙмышы хаҡында борсолоуы менән Мәжит Ғафури тел һәм уны ҡулланыусы этнос яҙмышы хаҡындағы борсолоуын да белдергән.

## 3. Ике яҡташ, Алтынсәс һәм “Аҡташ”

1914 йылда “Әҙәбиәт кисәктәре” тигән йыйынтыҡта Мәжит Ғафуриҙың “Ағиҙел буйында” тигән әҫәре баҫыла. Шағир уны әкиәт тип тәҡдим иткән. 1919 йылда иһә шул уҡ әҫәр “Хан ҡыҙы Алтынсәс” тигән исем аҫтында айырым китап итеп баҫтырыла. Варианттары табыла торһа ла, үкенескә ҡаршы, ул сюжет әлегәсә фольклорсыларыбыҙ иғтибарына юлыҡҡаны юҡ. Шағир был әҫәрҙе айырым баҫтырмаған. Уны, әйтелгәненсә, әҫәр эсендәге хикәйәт рәүешендә генә тәҡдим иткән: өс бүлектән торған хикәйә-нәҫер контексында уға бары бер генә бүлек бүленһә лә, асылда тап ошо сюжетҡа уны композицион яҡтан ойоштороу бурысы йөкмәтелгән. Баштағы ике бүлек иһә бары авторҙың бүтән ҡайһы бер әҫәрҙәренә (мәҫәлән, “Ҡыҙыл йондоҙ” пьесаһына) хас булған композицион алым — оҙайлы экспозиция хеҙмәтен генә үтәй. Беренсе бүлектә Ғафури бала саҡта иптәштәре менән Ағиҙел буйына балыҡҡа барырға әүәҫ булыуҙары, ҡарт балыҡсы янына барып, тамаҡ ялғап, уның әңгәмәләрен тыңларға яратыуҙары хаҡында бәйән итә. Икенсеһендә иһә ҡармаҡ һалыусы балаларҙың ҡаршылағы Аҡташ тауындағы ҡаяға менеү хаҡында хыялланыуына ҡаршы ҡарттан “Сығырһың унда, атаң башы! Бар әле сығып ҡара — үҙеңде ендәр ботарлап ташламаҫтар!” тигән реплика әйттерә. Шул реплика үҙе уҡыусыларҙа ла балалар биргән “нисек һуң улай?” тигән һорау тыуыуына, тимәк, һүҙҙең артабан яңы юҫыҡта ялғаныуына, һәр кемдең тәбиғәт хозурлығын күҙәтеп ултырыусынан тыңлаусыға әүерелеүенә сәбәпсе була. Ул шулай уҡ әҫәрҙең стиле үҙгәреүгә лә килтерә. Ике бүлеккә тартылған экспозиция “беҙ” исеменән шаһитлы үткән заманда хәтирә стилендә бирелһә, балыҡсы ҡарт исеменән теркәлгән эпик сюжетта тасуирланған ваҡиғалар, эпос стиле талап иткәнсә, шаһитһыҙ үткән заманда бәйән ителә.

Иҫегеҙҙәлер, был яҙманың тәүге өлөшөнөң аҙағында М.Өмөтбаевтың тырышлығы арҡаһында Аҡташ хан хаҡындағы эпостың бер варианты беҙгә килеп етеүе хаҡында әйтелгәйне. М.Ғафуриҙың “Хан ҡыҙы Алтынсәс” әҫәрендә һүрәтләнгән ваҡиғалар, асылда, “Аҡташ хан” дастанында һүрәтләнгән ваҡиғалар барған Аҡташ тигән ерҙә бара. Ихтимал, ҡасандыр был әҫәр, “Урал батыр”, “Иҙеүкәй менән Мораҙым” һымаҡ уҡ, шау ҡобайырҙан йә “Заятүләк менән Һыуһылыу”, “Аҡһаҡ ҡола”, “Ҡара юрға” иртәктәре кеүек, сәсмәүер менән ҡобайыр аралашып килеүе рәүешендә мәғлүм булғандыр һәм күләмле генә эпос рәүешендә йәшәгәндер. Үкенескә ҡаршы, М.Ғафури ул хаҡта иҫкәрмә бирмәгән. Үҙе иһә балыҡсы ҡарт исеменән уның бер вариантын ҡыҫҡаса ғына бәйән иткән. Бәлки, әҫәрҙең был вариантының балаларға тәғәйенләп баҫтырылыуы ла шуны талап иткәндер. М.Ғафури бәйән иткән эпос, бәлки, ырыуҙашы М.Өмөтбаев теркәгән “Аҡташ хан” эпосы менән йә тамырҙаш булғандыр, йә бер бөтөндө хасил иткәндер. Үкенескә ҡаршы,

хәҙер был “ихтимал” һәм “бәлки”ҙәрҙең береһенә лә аныҡлыҡ индереү мөмкинлеге юҡ.

“Хан ҡыҙы Алтынсәс”тең сюжеты эпик фольклор әҫәренә хас традицион конфликтты үҙ эсенә алған “сит хаким үҙен үҙһенмәгән сибәрҙе көс менән алырға итә” мотивына нигеҙләнә. Яу башы был теләген, ант иткәндәй ҡәһәтләнеп: “Һуғышып булһа ла алырмын, буш ҡул менән ҡайтмам!” — тип белдерә [4, 77-се б.].

Мәжит Ғафури ижадын монографик планда тикшергән Ғилемдар Рамазанов атлы әҙәбиәт белгесебеҙ был әҫәрҙең героиняһы хаҡында: “Хан ҡыҙы Алтынсәс көслө характерлы ҡыҙ булып һүрәтләнә”, — тип яҙғайны [7, 163-сө б.]. Ысынлап та, шулай. Алтынсәстең был һыҙаты уны Яйыҡ буйы яу башлығы һоратҡанда уҡ асыла башлай. Берҙән, яусыға яуап биргәнсе, атаһы ҡыҙының фекерен һорай. Ә был үҙе үк ҙур мәғәнәгә эйә. Бынан беҙ Алтынсәстең үҙ фекере менән башҡаларҙы , хатта хакимдарҙы ла иҫәпләшергә мәжбүр итерлек ихтыяр эйәһе, тимәк, ирек һөйөүсән һәм үҙ аллы булыуына төшөнәбеҙ. Икенсенән, ошо баһабыҙҙы атаһына ҡыҙҙың: “Йәйенке битле, Яйыҡ буйы илбаҫарына барыр хәлем юҡ! Аҡташ тауы өҫтөнән Урал тауы аръяғына бармайым. Атайым, дошманға ҡаршы һуғыш асып булһа ла, мине бирмәһен. Әгәр ҙә мине көсләп бирәләр икән, икенсе көн мине яҡты донъяла күрмәҫтәр”, — тип әйткән яуабы [4, 77-се б.] уҡ ҡеүәтләй. Беҙҙә тыуған фекерҙе артабан Алтынсәскә эш-хәрәкәттә дәлилләргә генә ҡала. Әммә ул тәүҙә атаһына янап әйткәндең киреһен эшләй: атаһының ғәскәре Яйыҡ илбаҫарынан еңелгәс, “үҙе, бик шәп ҡара юрғаға атланып, ҡулына уҡ һәм һөңгө алып”, яуға ҡаршы сыға. Ошо ҡыланышы уны “Алдар менән Зөһрә” иртәге [3, 150—276-сы бб.], “Ырғыҙ” [2, №73] риүәйәте героинялары менән бер рәткә ҡуя.

Яйыҡтан килеп ҡыҙ һоратҡан яу башының образы иһә әҫәрҙә Алтынсәс образы менән контраст планда асыла. Контраст, аңлашылыуынса, Яйыҡ батыры файҙаһына түгел. Алтынсәс уны бары үҙе яратмаған өсөн генә илбаҫар тип атамай. Ул — ысындан да илбаҫар. Алтынсәсте һоратыуы уҡ эс тартырға мәжбүр итә. Һоратыуы — һоратыу рәүешле түгел, торғаны ультиматум. Сөнки ул “Алтынсәсте алырға килгәнен”, әгәр ҙә мәгәр хан уны “яҡшылыҡ менән бирмәһә, һуғышып булһа ла алырға теләгәнен әйтеп ебәргән” [4, 77-се б.]. Алтынсәс уның талабын кире ҡаҡҡас иһә, һүҙҙән эшкә күсә. Тимәк, ул кәләш алыу мәсьәләһендә лә илбаҫарҙарса, ҡараҡтарса эш итә.

Илбаҫар яу башлығы менән Алтынсәс образдары уларҙың сағыштырма юҫыҡта бирелешендә лә контраслаша. Илбаҫар портреты ҡыҙ күҙлегенән “йәйенке бит” тигән “ямаҡайлыҡ, яманлау формулаһы” менән бирелһә, ҡыҙҙың үҙенә эпик ҡомартҡылар, тылсымлы әкиәттәр өсөн традицион стереотип стилистик формула, “бер бите — ай, бер бите — көн кеүек һылыу ҡыҙ” [4, 77-се б.] тигән “матурлыҡ формулаһы”, ярҙамында баһа әйтелә.

“Хан ҡыҙы Алтынсәс” эпосы легендаларға хас “әмәлләнгән хазина” мотивы менән тамамлана: йәнәһе лә, илбаҫарҙы еңә алмағас, Алтынсәс атаһы алтын-көмөш йәшергән мәмерйәгә инеп юғала ла, йәйге матур төндәрҙә әле һаман, таң атҡансы, тау киртләсенә сығып ултыра була, ә теге хан хазинаһына ендәр эйәләшкән дә, уны алырға килеүселәргә ҡоралллы ҡарауыл булып

күренә була. Ошо күҙлектән ҡарағанда, Мәжит Ғафуриҙың “Ғәйеп хазина” әкиәте “Хан ҡыҙы Алтынсәс” иртәгенең дауамы кеүек тә, әмәлләнгән хазина тураһында балыҡсы ҡарт бала-сағаға һөйләгәнде инанмыш (быличка) менән йөпләү кеүек тә ҡабул ителә. Балыҡсы ҡарт хикәйәте шул хазина менән ҡыҙыҡһынған бала-сағаны мәмерйәгә барыуҙан тыйып, унда һаҡсы ендәрҙең ҡоралды ҡарауыл булып күренеүе хаҡында хәбәр итеү менән генә сикләнә. “Ғәйеп хазина”ла иһә автор хазинаны табыу серен аса. Бының өсөн халыҡ инанысын бик тә урынлы файҙалана. Әҫәрҙең, шул инаныс талап иткән ысулды ҡулланыуы арҡаһында, Илкә батырҙың хазинаға юлығыуы, шул арҡала мажараларға дусар булыуы (мәмерйәлә сибәр ҡыҙҙы осратып, уның муйынындағы ҡиммәтле таштарҙан теҙелгән мәрйенен алырға маташыуы; нәфсеһен тыя алмай, хазинаны күпләп алам тигәнсе, уға бер аҫыл таш менән генә хушһынырға тура килеүе, шуның менән дә байығыуға өлгәшеүе) хаҡындағы өлөшө иһә, йәғни инаныстың ғәмәлләшмеше — инанмыштан (быличканан) ғибәрәт. Халыҡтың әмәлләнгән хазина хаҡындағы инанысын шағир бына нисек шиғыр үлсәменә һалған:

Ишеткән ул (Илкә батыр. — ***Ә.С.***):

Боронғо батшалар үлгән ваҡыттарҙа,
Йәки ситтән, йыраҡтан ишле яу килгән ваҡыттарҙа —
Улар хазиналағы бар малдарын шунда йәшергәндәр,
Кеше тапмаҫ урындарға, ҡараңғы ергә күмгәндәр.
Яҡут-йәүһәр, көмөш-алтындары дошманға ҡалмаҫҡа,
Ни саҡлы торһа ла хазина, кеше теймәҫкә, алмаҫҡа.
Хакимдәрен саҡыртҡандар, ҡушып тылсым яһатҡандар,
Бөтә мал-милке менән бик тыныс шул ерҙә ятҡандар.
Быларҙың тылсымы ниндәй ҙә хайуан исеменә булған,
Быны һис бер кеше белмәй, был “хайуан” ниндәйен хайуан.
Берәү белеп был хайуанды, әгәр ҙә салһа ҡорбанға,
Иҫәпләргә ярай шул саҡта тылсымды боҙолғанға.
Был тылсымдың, шулай иткән ваҡытта, тәьҫире ҡалмай,
Ҡаталар таш булып ендәр урындарында, ҡуҙғалмай.
Был хайуанды белергә һуң кешелә бер әмәл бармы?
Был тылсымды ҡырырға бер доға бармы? Ғәмәл бармы?
(Йыһанда ниндәй эштең сараһы юҡ, ижтиһад итһәң),
Белеп була икән быны, әгәр ҙә шунда көл һипһәң.
Сығып йөрөй икән хайуан булып ен, бер ваҡыт төндә,
Әҙәмдең хәйләһен белмәй, баҫып йөрөй икән көлдә.
Тораһың да ҡарайһың, бер ҙә ҡурҡмайса, барып көндөҙ,
Көл өҫтөндә булалыр ни ҙә булһа, шөбһәһеҙ бер эҙ.
Көл өҫтөндә эҙе ҡалған, нисек тә булһа бер хайуан —
Салаһың нәҡ шуның төҫлө берәр хайуанды һин ҡорбан.
Шул уҡ сәғәт үлә ендәр йәки биреләләр барыһы,
Кәрәк күпме мал алһаң да, улар килмәйҙәр ҡаршы.
Улар һис ҡаршы тормайҙар, һинең ҡулда була аҡса,
Уларҙың һәммәһе ҡол булалар, уларға һин — батша [5, 232—233-се бб.].

Бындай инанмыштарҙы халыҡ араһында әле лә ишетергә була [1, 98—153-се бб.].

Балыҡсы ҡарт бәйән иткән “Хан ҡыҙы Алтынсәс” иртәгенән Яйыҡтың “йәйенке битле” батырына барырға теләмәй, Алтынсәстең уға ҡаршы яу асыуын, еңелә башлағас, хазина мәмерйәһенә инеп йәшеренгәнен генә беләбеҙ. Уның ҡыйыу ҡыҙ булыуына төшөнһәк тә, матурлығын күҙ алдына килтерә алмайбыҙ. “Ғәйеп хазина” әҫәре ошо “бушлыҡты” тултырырға булышҡандай итә. Инанмыш өйрәткәнсә, Илкә батыр, “Ғәйеп хазина”ла мәмерйә ауыҙына көл һибеп, унда әтәс тәпәйенән ҡалған эҙҙе күреп, әтәс ҡорбан итеп, мәмерйәгә ингәс, шунда күргән ҡыҙҙың һылыулығын шағир шулай тасуирлай:

Йөрөй торғас, батыр иң һуң барып бер бүлмәгә керҙе,
Аҫыл таштарға сыуалған матур ҡыҙҙы күҙе күрҙе.
Был ҡыҙ — нур, тик тәжәссем әйләгән нурҙан ҡойолған ул,
Кешеләр был “хоҙай” тимәҫ өсөн бында ҡуйылған ул.
Бының матурлығын һис тиңгәреп булмай матурҙарға,
Бының янында һан юҡтыр фириштә һәм дә хурҙарға.
Быны күргән кеше һис ихтыярһыҙ сәждәгә йығылыр,
Бының алдында таш төҫлө күңелдәр йомшарыр, һығылыр.
Тора был ҡыҙ ҡарап, ҙур, аҡ, ҡара күҙҙәрен тултырып,
Аҫыл таштар менән биҙәкләнгән бер көрсигә ултырып.
Аҫыл таштар тағынған ул, кейенгән өҫтөнә аҡтан,
Ике яҡта ике һалдат, торалар, таш кеүек ҡатҡан.
Батыр хайран булып ҡарап тора, ҡыҙҙан күҙен алмай,
Был ҡыҙҙың йәне бар төҫлө, ләкин ул һис тә ҡуҙғалмай [5, 235-се б.].

Был тасуирлама “Хан ҡыҙы Алтынсәс” иртәге менән таныш кеше өсөн Алтынсәс образын тулыландырыу сараһы кеүек тойола. Ғөмүмән, был иртәк менән “Ғәйеп хазина”ны бергә уҡыһаң, икенсеһе тәүгеһенең дауамы кеүек ҡабул ителә. Бәлки, ҡасандыр шул ике сюжет бер бөтөндө тәшкил иткәндер, Мәжит Ғафури иһә уларҙан ике әҫәр хасил итеүҙе кәрәк тип тапҡандыр. Бәлки, “Ғәйеп хазина” әмәлләнгән хазиналы мәмерйәгә инеп юғалған иртәк ҡаһарманы Алтынсәс яҙмышы хаҡында уйланыуы һөҙөмтәһендә тыуғандыр ҙа, ни сәбәптәндер шағир ике сюжетты бергә ҡушырға өлгөрмәй ҡалғандыр. Нисек булғанда ла, бында уйланаһы урын бар.

М.Өмөтбаев әйтеүенсә, уның замандаштары, ысынлап та, Ағиҙел буйындағы Нараш, Аҡташ тауҙарында кеше “торорға яраҡлаштырып эшкәртелгән ҙур мәмерйәләр бар”, тип һөйләр булғандар [6, 204-се б.].

“Әмәлләнгән хазина” мотивы тарафтарына килһәк, эпосҡа ул аҙағырак ялғанғанға оҡшай. Ниндәйҙер фантастик мотивты эпосҡа ялғап ҡуйыу хәлдәре әле лә осраштыра. “Урал батыр” эпосы йә уның төп ҡаһарманы хаҡында һүҙ барғанда, Шүлгән мәмерйәһе һыртында төнөн Аҡбуҙат йөрөүен күреүселәр булыуы, Урал тауы буйлап Аҡбуҙатҡа атланған, ҡулына ҡылыс тотҡан, буй-һыны болоттан ашҡан Урал батыр күренгеләп ҡалыуы хаҡындағы имеш-мимештәрҙе өҫтәп ҡуйыу ҙа — шуға миҫал (тәүгеһе хаҡында 1991 йылда Бөрйән районы Иҫке Собханғол урта мәктәбе уҡытыусыһы Вәлиева Асиянан яҙып алынды,

икенсеһе — Әбйәлил районы Асҡар ауылы Мөғәлләм сәсән Мирхәйҙәров мәғлүмәте).

“Хан ҡыҙы Алтынсәс” эпосының төп идеяһы “ҡыҙ намыҫын яттан һаҡлау ни ҙә — ил намыҫын илбаҫарҙан яҡлау ни” тигәнгә ҡайтып ҡала. Алтынсәсте Яйыҡ илбаҫарына бирмәҫ өсөн хандың яуға — яу булыуы, улай ғына ла түгел, ҡыҙҙың үҙенең дә атҡа атланып, ҡулына ҡорал алыуы шуны раҫлай. “Ҡыҙ намыҫы — ил намыҫы” идеяһы кимәлендә был эпос “Тарғын менән Ҡужаҡ” эпосын хәтерләтә. Икеһендә лә килмешәк егет алырға маташҡан ҡыҙ — әллә кемдең түгел, мотлаҡ хандың ҡыҙы. Килмешәкте ҡыҙыҡтырған ҡыҙҙың социаль сығышының шулай күрһәтелеүе — һис кенә лә формаль мәғлүмәт түгел. Ул үҙе үк — художество әһәмиәтенә эйә булған деталь. Элекке ҡараш буйынса, хан балаһы булыу — элита балаһы, затлы булыу тигәнде аңлатҡан. Шуға ла әҙ генә кәмселеге булған кеше хаҡында йәнле телдә йыуатыуға тәғәйен “Ундай ғына (кәмселек) хан ҡыҙында ла була, ти” тигән фразеологик берәмек ҡулланылыусан. Шулай булғас, шундай ҡыҙ баланы ятҡа бирмәү — әлеге идеяны тағы тәрәнәйтә төшөү тигән һүҙ.

Әммә эпос: “Эш быны менән генә бөтмәй әле. Аңлағанға — ишара”, — тигән кеүек, көсләшмәй-ҡыҫташмай ғына, ошо идеяның асылышын аҙаҡҡа тиклем “һүҙа”, уны онторға ирек бирмәй. Әҫәрҙең аҙағында эпилог рәүешендә бирелгән легендар мотив бына шуға тәғәйен дә инде. Йылдар үткәс тә, “йәйге матур төндәрҙә Алтынсәс, тау тишегенән сығып, оҙон сәстәренә күмелеп, туғайға табан ҡарап, таң атҡанса ултыра” [4, 77-се б.]. Үҙе ил намыҫы символына әүерелгән ҡыҙҙың шулай ваҡыт-ваҡыт күренеүе — ил намыҫын ҡурсалау фарыз икәнлеген һәр саҡ хәтергә төшөрөү ихтыяжын аңлата булһа кәрәк. Тимәк, аҙаҡ өҫтәлгәнме, нисек, эпилог рәүешендә бирелгән легендар мотив — был осраҡта традицияға күҙ йомоп эйәреү һөҙөмтәһе генә түгел. Ул әҫәрҙең эске логикаһы, идея тәғәйенләнеше менән аҡлана.

М.Ғафури ижади файҙаланған эпик сюжет менән М.Өмөтбаев теркәп ҡалдырған “Аҡташ хан” дастаны араһында бәйләнеш булыуы бик тә ихтимал. Бәлки, “Хан ҡыҙы Алтынсәс” дастаны “Аҡташ хан” әҫәренең дауамы булғандыр. Әгәр ҙә был фаразда дөрөҫлөк бар икән, ул сағында М.Өмөтбаев яҙмаһы Алтынсәстең атаһының биографияһын күпкә тулыландырғандай булыр.

Өмөтбаев үҙе иҫкәртеүенсә, был дастанды ул “Окианус” китабынан (Төркиәләге “Окианус” нәшриәте сығарған китаптан булыуы ихтимал. — ***Ә.С.***) уҡыған булған да, ана шул Аҡташҡа ҡағылышлы өлөшөн генә үҙ һүҙҙәре менән бәйән итеү менән сикләнгән. Әммә, шулай “ҡуян һурпаһының һурпаһы” хисабында ғына булһа ла, был баҫма беҙҙең тарихи эпостарыбыҙ репертуарының борон ни тиклем бай булыуын тулыраҡ күҙалларға булышыуы менән әһәмиәтле. Тағы шуныһы: нәҡ ошо баҫмала беҙ Урта Азия сығышлы ҡәүемдәрҙең тарихында билдәле бер урын алған Искәндәр (Зөлҡәрнәйен) — Александр Македонскийҙы башҡорт дастаны ҡаһарманы сифатында күрәбеҙ.

Әҫәрҙең төп геройы — ғәскәр башы Аҡташ. Ул хәйләкәр һәм мәкерле зат булып хәтерҙә ҡала. Уның был сифаттары нисек фашлана һуң? “Юш (Яуш) хан йыһандан киткәс, улы Таҡташты” хан итеп күтәргәнде көткән кеүек, полководец

Аҡташ был йәш малайҙы тәхеттән ҡыуа ла, үҙе хан булып ала. Уның нәфсеһе быны менән генә сикләнмәй, киреһенсә, үҫә генә. Ул ярты донъяны яулап алған Искәндәр атлы йыһангирҙы буйһондороу хаҡында хыялланырға батырсылыҡ итә һәм: "Һис кем донъяла шаһтарҙан миңә ҡарышманы. Хоҙа бирәүгә ярҙам бирһә, ... бәндә алыр", — тип, уны хәйлә тоҙағына эләктерергә йыйына [4, 75-се б.]. Искәндәрҙе ҡунаҡҡа саҡырып, уның башына етмәксе була. Әммә мәкерле уйы уның үҙ башына ғына була. Аҡташ үҙе хәйлә тигәнде беҙ ниңә мәкерлек тип beләбеҙ һуң? Сөнки яҡшы ниәтле кеше саҡырған ҡунағына яманлыҡ ҡылмаҫ булыр.

Дастанда һигеҙ йөҙ егерме яугирҙың ҡан ҡаҙанында ҡайнауы дәһшәтле бер күренеш төҫөн ала. Әммә Искәндәрҙең яу тәжрибәһе үҙенекен итә: һаҡланыу сараһын көнэлгәре күреүе арҡаһында, әҙ көсө менән дә ул Аҡташты еңеп сыға. Искәндәрҙең оҫталығына һоҡланырға ғына ҡала.

Яуҙың шулай Искәндәр файҙаһына тамамланыуында уның Ҡасфран тигән ете йәшлек улы менән Мысырҙан алған ҡатыны Шәмалбаныу һәм Миһран хандың ҡыҙы Дилшат, Дәмнүәһәр ҡыҙы Фарух, Ҡыйҡан ҡыҙы Шәһребан һәм башҡаларҙың да өлөшө бар. Сөнки аҡташтар Искәндәр яуын байраҡ төбөнә ҡыҫырыҡлаған мәлдә тап шул малай менән шул ҡатын-ҡыҙ ҡорал тотоп, тегеләр өҫтөнә ташлана һәм шул рәүешле үҙ яугирҙарының рухын күтәрә. Шул күтәренкелек яу һөҙөмтәһен хәл итә лә инде.

"Хан ҡыҙы Алтынсәс" әҫәре менән "Ҡанлыкүл" риүәйәте, дөрөҫөрәге, ҡыҫылған, ҡыҫҡартылған эпик сюжет араһында ла уртаҡлыҡ булыуы ихтимал. Асылда, өс әҫәрҙә лә ваҡиға хәҙерге Архангель, Ҡырмыҫҡалы тирәһендә, Оло Инйәр, Ҡесе Инйәр Ағиҙелгә төшкән ерҙәрҙә, Аҡташ тауында бара. "Ҡанлыкүл" сюжетының бер вариантын 1962 йылда ошо юлдарҙың авторы Ҡыҙыл Яр ауылында (Архангель районы) яҙып алып ҡайтҡас (уның тағы бер вариантын М.Өмөтбаев баҫтырған булған), Ҡирәй Мәргән: "Был риүәйәт берәй тарҡалған эпостың ярсығы булыуы ихтимал", — тигәйне. Профессорҙың фаразында дөрөҫлөк барға оҡшаған. Ысынлап та, М.Өмөтбаевтың "Йәдкәр" китабына ингән һәм миңә яҙып алырға насип булған "эпос ярсығы" хан ҡыҙы Алтынсәстең "йәйенке битле" Яйыҡ батыры менән алышы ни тиклем көсөргәнешле булыуын күҙ алдына килтерергә ярҙам итә кеүек. Беҙҙең дәүергә риүәйәт рәүешендә килеп еткән ул "эпос ярсығында" ҡыҙ хан менән ир хан ғәскәрҙәренең аяуһыҙ бәрелеше хаҡында һүҙ бара. Алыш шул тиклем була, яралы яугирҙарҙың, яралы яу аттарының аҡҡан ҡаны, эркелеп, хатта ат тубығына етә. Ҡем белә, бәлки, ҡыҙ хан тигәне — Алтынсәс, ир хан тигәне "йәйенке битле" Яйыҡ батыры булғандыр.

Һәр хәлдә, М.Ғафури үҙенең хикәйәһендә, интертекст алымына таянып, файҙаланған эпик сюжет беҙҙең бабаларыбыҙҙың эпик репертуарының бай булыуы хаҡында фекер йөрөтөргә форсат биреүе менән дә әһәмиәтле. Икенсенән, "Хан ҡыҙы Алтынсәс", "Аҡташхан", "Ҡанлыкүл" сюжеттары ҡасандыр Ағиҙел — Оло һәм Ҡесе Инйәр бассейны ла (киңерәк итеп әйткәндә, Мең, Табын ҡәүемдәре биләмәһе лә) эпик ҡомартҡылар төйәге булған тигән фекергә нигеҙ бирә.

Шуныһын да әйтәйек: Алтынсәс сюжеты академик Зиннур Ураҡсинды "Аҡтау ҡәлғәһе" тигән повесть яҙыуға рухландырған [8, 209—256-сы бб.]. Уныһы иһә айырым байҡауға лайыҡ.

## Әҙәбиәт

1. *Ахметшин Б.Г.* Горнозаводской фольклор Башкортостана и Урала. — Уфа: Ҡитап, 2001.

2. Башҡорт халыҡ ижады / Төҙ., инеш мәҡ., аңлатмалар, күрһәткес һәм һүҙлек авт. Ф.А.Нәҙершина; яуаплы мөхәрр. Ҡирәй Мәргән, Ә.М.Сөләймәнов. — Өфө: Ҡитап, 1997. 1-се том: Риүәйәттәр, легендалар. 440 б.

3. Башҡорт халыҡ ижады / Матер. һайлаусы, төҙ. һәм аңлатмалар бир. М.М.Сәғитов һәм Б.С.Байымов; инеш мәҡ. авт. М.М.Сәғитов һәм Б.С.Байымов, С.Ә.Галин; томдың яуаплы мөхәрр. Ә.И.Харисов, С.Ә.Галин. — Өфө: Ҡитап, 1999. 4-се том: Эпос. 400 б.

4. Башҡорт халыҡ ижады / Текстарҙы асыҡлап, барлап, томды төҙ. Ә.М.Сөләймәнов, Ғ.Б.Хөсәйенов, М.Х.Нәҙерғолов; инеш мәҡ. авт. Ә.М.Сөләймәнов; һүҙ ахыры Ғ.Б.Хөсәйенов, Ә.М.Сөләймәнов, М.Х.Нәҙерғолов һәм Ф.Сибәғәтовтыҡы; аңлатмалар һәм һүҙлекте Ғ.Б.Хөсәйенов, М.Х.Нәҙерғолов ҡатнашлығында Ә.М.Сөләймәнов әҙерләне; яуаплы мөхәрр. Ә.М.Сөләймәнов. — Өфө: Ҡитап, 2004. 7-се том. 624 б.

5. *Ғафури М.* Әҫәрҙәр. — Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1954. 1-се том. 270 б.

5а. *Ғафури М.* Әҫәрҙәр. — Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1953. 2-се том.

6. *Өмөтбаев М.И.* Йәдкәр / Текстологик эштәрҙе башҡарыусы, төҙ., баш һүҙ яҙ., аңлатмалар биреүсе Ғиниәт Ҡунафин. — Өфө: Башҡортостан кит. нәшр.,1984. 288 б.

7. *Рамазанов Ғ.З.* Мәжит Ғафури ижады. — Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1965. 448 б.

8. *Ураҡсин З.Ғ.* Ҡарат. — Өфө: Ҡитап, 2005.

## Өҫтәлмә әҙәбиәт

9. Башҡорт халыҡ ижады: Йырҙар. 1-се кит. / Матер. һайлаусы, төҙ. һәм аңлатмалар бир. С.Ә.Галин; томдың яуаплы мөхәрр. Ҡ.Ә.Әхмәтйәнов. — Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1974. 388 б.

10. Восточно-славянский фольклор: Словарь научной и народной терминологии / Отв. Ред. Ҡ.П.Ҡабашников.— Мінск: Навука і техніка. 478 с.

11. *Галин С.Ә.* Башҡорт халҡының йыр поэзияһы. — Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1979. 256 б.

12. *Ҡирәй Мәргән.* Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. — Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1961. 388 б.

13. *Лебединский Л.Н.* Башкирские народные песни и наигрыши. — М.: Музыка, 1965. 346 с.

14. *Минһажетдинов Х.Х., Сөләймәнов Ә.М.* Башҡорт легендалары // Башҡорт легендалары: Юғары уҡыу йорттары студенттары өсөн уҡыу ҡулланмаһы / Материалды һайлаусы, системаға һалыусы Ә.М.Сөләймәнов; Төҙ., иҫкәрмә биреүселәре һәм ред. Х.Х.Минһажетдинов, Ҡирәй Мәргән; инеш мәҡ. авт. Х.Х.Минһажетдинов, Ә.М.Сөләймәнов. — Өфө: БДУ нәшр., 1969. 12—13-сө бб.

15. *Нәҙершина Ф.А.* Башҡорт халыҡ йырҙары, йыр-риүәйәттәре. — Өфө: Ҡитап, 1997. 288 б.